

# Башҡорт әҙәбиәтенең классигы

Мәжит Ғафури

# Мәжит Ғафури БАССР-ҙың тәүге халыҡ шағиры



Мәжит Ғафури (Ғәбделмәжит Нурғәни улы Ғафуров) 1880 йылдың 2 августа Башҡортостандың Стәрлетамаҡ өйәҙе (хәҙерге Ғафури районы) Еҙем-Ҡаран ауылында хәлфә ғаиләһендә тыуған.



Ете йәштән үҙҙәренең ауыл мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Бер аҙҙан һуң Еҙем-Ҡарандан алыҫ түгел Үтәш ауылы мәҙрәсәһендә уҡып белем ала.





«Шәриғәт ҡорбандары » Р. Б. Нурмөхәмәтов
М. Гафуриның «Ҡарайөҙләләр» әҫәренә арнап яҙылған һурәт

# Шағирҙың белеме



Мәжит Ғафури 18 йәшендә Ырымбур губернаһы Троицк ҡалаһындағы «Рәсүлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға килә.

1898 йылда Троицк ҡалаһында Зайнулла ишан мәҙрәсәһенә уҡырға керә. Уҡыған ваҡытта халыҡ тормошон ныҡлап өйрәнә, төрлө заводтарҙа, Рәмиевтең алтын приискыларында эшләп уҡыуын дауам иттерә. Ҡаҙаҡ далаларында балалар уҡыта, ҡаҙаҡ халҡының фольклорын өйрәнә, рус әҙәбиәте менән дә ҡыҙыҡһына башлай. 1904 йылда Ҡаҙанда «Мөхәммәдиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә. 1906—1909 Өфөлә «Ғәлиә» мәҙрәсәһендә уҡый. «Ҡыҙыл Башҡортостан», «Коммуна» гәзиттәре редакцияһында эшләй.

# Шағирҙың ғаиләһе





«Ғабдулла Тукай менән Мәжит Ғафуриның осрашы»
Әмир Арсланов

Мәжит Ғафуриҙың һәйкәле Башҡорт дәүләт академия драма театры алдында 1923 йылда уға “БАССР-ҙың халыҡ шағиры” исеме бирелә Унын исеме Башҡортостандың бер районына, Башҡорт дәүләт академия драма театрына бирелгән. Өфөлә М. Ғафури йорт-музейы (1948) бар







Халыҡ шағиры Мәжит Ғафури – күп яҡлы талант эйәһе. Ул мәғрифәтселек, революцион-демократик идеялы шиғырҙары, поэмалары, реалистик прозаһы менән бергә мәсәл жанрында, тәнҡит, публицистика өлкәһендә, башҡорт фольклорын йыйыуҙа һәм өйрәнеүҙә әүҙем эшләне, балалар өсөн мауыҡтырғыс әҫәрҙәр ижад итте.



1934 йылдың 28 октябрендә Мәжит Ғафури үпкә ауырыуынан Өфөлә вафат була.Уны ҡаланың А.Матросов исемендәге ял паркында ерләйҙәр.



Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейы Өфө ҡалаһының, Гоголь урамында урынлашҡан. Мәжит Ғафури был өйҙә аҙаҡҡы 11 йылын йәшәгән. Шағирҙың бик күп билдәле әҫәрҙәре ошо йортта йәшәү дәүерендә барлыҡҡа килгән.



# Мәжит Ғафуриҙың бүлмәһе



# Ғафури районында Елем-ҡаран ауылында М. Ғафуриның мемориаль-музейы





# Ишимбай районында Мәжит Ғафуриға һәйкәл

